*Таңһылыу ҠАРАМЫШ,*
*шағирә*

# МОҢДОҢ ЙӘНЕ — МӨХӘББӘТ



Һандуғастың һайрар ғүмере — ҡырҡ көн, ти халҡыбыҙ. Һайрар, ижад итер ғүмере ҡырҡ йылға ла тулмай, яҡты донъяла барлығы 46 йыл ғына йәшәп китеп барҙы арабыҙҙан иң сағыу башҡорт шағирәләренең береһе Рәмзилә Хисаметдинова. Унан мираҫ булып сутылдап, түгелеп һайрап торған һоҡланғыс шиғырҙар, маһир ҡулы яҙған тылсымлы ижад, васыят булып «моңдоң йәне — мөхәббәт»те данлаусы һандуғас йыры ҡалды.

Һауа ҡараңғыһын йырған нур шикелле, шағирә Рәмзилә ғүмеренең аҙағынаса үҙенең бөтә барлығын биләп алған шиғриәт тәьҫирендә йәшәне, рухи яҡтан һәр ваҡыт шағирә, бары шағирә генә булып ҡалды. Уның шиғырҙары образлылығы менән генә, һүҙ биҙәге менән генә түгел, ә ихласлығы, эскерһеҙлеге, алсаҡлығы менән йәнде арбай, хистәренең урғылыуы, сылтырауы,

йылтырауы менән әсир итә, тауышының сәңгеллеге, сағыулығы менән хайран ҡалдыра.

Күңел хистәре, йән зауығы, рух ихтыяжынан тыуған ижад ине Рәмзилә Хисаметдинованың яҙғандары. Уның шиғриәтенән яңғыраған моң арбау көсөнә эйә, тылсымы — рухиәт, хиссиәт.

Рәмзилә менән мин 1966 йылдан башлап, өс йыл буйы Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында, ул Стәрлетамаҡ педагогия институтына киткәнсе, бер төркөмдә уҡыным. Бергә уҡый башлаған йылдарҙан алып ғүмерлеккә әхирәттәр булып ҡалдыҡ, дуҫлығыбыҙ яҡтыһына бер ҡасан да шәүлә төшмәне, алыҫта ла, яҡында ла, ҡайғыла ла, шатлыҡта ла бергә булдыҡ.

Рәмзилә ете төн уртаһында һикереп тороп, ут тоҡандырып, шиғыр яҙырға ултырыр ине. Шунан, зәңгәр күҙҙәренән ап-аҡ йөҙөнә серле осҡондар сәсрәтеп, билдән түбән ҡуйы ҡуңыр сәстәрен арҡаһына һирпеп ебәреп, илһамланып, яңы яҙған шиғыры уҡып ишеттерер ине. Шиғыр миңә күктән яуа, тиер ине. Эске талпыныу, ашҡыныу, тыйылғыһыҙ дәрт менән тулы, үҙлегенән үҙлеге тыуған ниндәйҙер мөғжизәле шиғырҙар ине улар — «ун һигеҙҙәге ялҡыным ҡалмаһын ғына ятҡа» тип маҡсат ҡуйған кешенең хыялый мөхәббәт яҙмалары:

*Хыялый һин!*
*Һине көтөп яҙын,*
*Йоҡлай алмай ятам таңдарһыҙ.*
*Һин үҙең дә бер аңларһың әле:*
*Ниндәй төсһөҙ яҙҙар наҙҙарһыҙ.*

Бындай илаһи мәлдәрендә, йән күкрәүҙәрендә ул ашау-эсеүҙән ҡалып, йоҡлар йоҡоларынан яҙып, шиғыр артынса шиғыр яҙырға тотонор ине.

Иң ҡыҙығы — үҙенең мөхәббәтен Рәмзилә бары ыңғай яҡтан ғына күрә, ишетә, тасуирлай, бер ниндәй ялғанлауһыҙ данға күмә, хатта һулар һауаһына әйләндерә ине:

*Сәстәрендә — сәскә еҫе,*
*Бал бөркәме сәстәрен.*
*Ҡорт күселәй ҡайнап китә,*
*Гөжләп китә хистәрем.*

Көслө тойғолары Рәмзиләгә көслө шиғырҙар бүләк итте. Уларға донъяға фәрештә ише саф, хаким ише азат, ирекле булып тыуған, ҡол булып әйләнмәгән кешенең хистәре һалынғайны.

Рәмзиләнең «Бүләгем», «Ирәмәл ҡыҙы» шиғри йыйынтыҡтары башҡорт шиғриәтенә оло бүләк булды.

Нескә лирик булһа ла, Рәмзилә холҡо менән ирҙәрсә ҡаты, тәүәккәл, рухы менән сая кеше ине. Рәмзилә яуызлыҡҡа ҡаршы тороуҙың ғына яҡшылыҡ икәнен, Хоҙай бәндәһенең ҡындәм зат түгеллеген, ә ғәҙеллек көрәшсеһе булғанын һәйбәт төшөнә ине. Шуға ла ул бер ваҡытта ла донъянан ситләшмәне, үҙ-үҙенә бикләнмәне, алышһыҙ бирелеү тигән нәмә уның ҡылығында булманы.

Яугир халҡыбыҙҙың — башҡорттоң саф рухы менән һуғарылған «Буранбай» шиғырындағы юлдарҙы Рәмзилә Хисаметдинованың йөрәк йырҙарына ҡарата ла төбәп әйтке килә:

*Бындай йырҙар баҫып йырланыла,*
*Бындай йырҙар ултырып йырланылмай.*

Үҙен ҡоштар телле халҡының бер ҡаурыйы тип атаған шағирәнең әйтер һүҙе, хисе, ысынлап та, ҡанатлы булды.

Рәмзиләнең һандуғас тауышы әле лә: «Мондоң йәне — мөхәббәт», — тип ҡабатлағандай.

* * *

Шағирә Рәмзилә Хисаметдинова 1949 йылдың 28 майында Учалы районының Сәфәр ауылында тыуған. Тыуған ауылында урта мәктәпте тамамлағас, шул мәктәп интернатында тәрбиәсе булып эшләй. Стәрлетамаҡ педагогия институтында уҡып сыҡҡас, тыуған районының Юлдаш, Сәфәр ауылдарында, шунан Салауат районының Малаяҙ мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләне. Ул 1995 йылдың 7 июнендә вафат булды.